82.3(2)
И39
СА-353011

# БАШҠОРТ ФОЛЬКЛОРЫ ӨЛГӨЛӘРЕН ӨЙРӘНЕҮ



Изучение образцов башкирского фольклора/Ю

# БАШҠОРТ ФОЛЬКЛОРЫ ӨЛГӨЛӘРЕН ӨЙРӘНЕҮ



*Башҡортостан Республикаһы*
*Мәғариф министрлығы тарафынан*
*тәҡдим ителде*

Государственное бюджетное
учреждение культуры
«Оренбургская областная универсальная
научная библиотека им. Н.К. Крупской»

са-353011

ИнО

КИТАП
ӨФӨ • 2013

## Йола фольклоры булараҡ
## йәдкәрҙе өйрәнеү

Борон-борондан кеше тәбиғәт ҡанундарына буйһонор булған. «Әҙәмдең һәр аҙымы, хатта ниәт-маҡсаттары ла әүәл-әүәлдән ҡанундарға яраҡлаштырылған. Улар бөтә кешегә лә фарыз иҫәпләнгән. Ана шул йоланы атҡарыу тиҙәр»[1].

Йола — кешенең йәшәйешен, донъяны танып белеүен, уға ҡарашын билдәләүсе, шул нигеҙҙә тәрбиәләүсе сара. Ул, халыҡ аманаты, хәтере булараҡ, быуындан быуынға, ҡулдан ҡулға тапшырыла килә, нығына. Донъяла, йәмғиәттә ниндәй генә иҡтисади-сәйәси үҙгәрештәр дауылы шаулап үтмәһен, хәтере, ихтыяры нык булғанлыҡтан, халыҡ үҙ телен, мәҙәниәтен, йола-фиғелен — милли йөҙөн һаҡлап алып ҡала алған. Шул уҡ мәлдә әлеге үҙгәрештәр, яңылыҡтар йоғонтоһоҙ үтмәгән. Улар халыҡҡа бөтә яҡтан да үҫешергә мөмкинлек бирә. Мәҫәлән, халыҡ ижады, йолаһы яңы күренештәр, төрҙәр менән байыҡтырыла, үҫешә, нығына.

Башҡорт халҡында бик күп йола күренештәре таралған: хөрәфәттәр (серле заттарға ышаныу, им-том, арбау, әпсенеү, мал-тыуарҙы имләү һ. б.); тәбиғәт-ыҙан йолалары, халыҡ байрамдары; ғаилә, көнкүреш йолалары һ. б. Халыҡ тормошонда, көнкүрешендә мөһим урынды биләгән ошо йола төркөмдәре араһында йәдкәр яҙыу, иҫтәлек дәфтәрен тотоу кеүек күренештәр ҙә һаҡланған. Ҡайһы бер ғалимдар уларҙы дәфтәр поэзияһы тип тә атай (М. Сәғитов, Н. Шоңҡаров). Иҫтәлек дәфтәрен (альбомын) тотоу, йәдкәр яҙыу, шиғри хаттар яҙыу — халыҡта әүәл-әүәлдән һаҡланып килгән йола.

Альбом кешеләрҙең бер дәүерен,
Бер заманын иҫкә төшөрә.
Бергә-бергә булған ваҡыттарҙы
Был дәфтәрең иҫкә төшөрә. (Я. Б.)

---

[1] Башҡорт халыҡ ижады: Йола фольклоры / Төҙ., баш һүҙ авт. Ә. Сөләймәнов, Р. Солтангәрәева. — Өфө: Китап, 1995. — 7-се б.

Ошо строфала ғына ла иҫтәлек дәфтәрен тотоу йолаһының маҡсаты һәм мәғәнәһе сағыла. Һуңғараҡ осорҙарҙа (бөгөн дә) йәштәр араһында ул көндәлек дәфтәре йәки йыр дәфтәре булараҡ таралған. Әммә уларҙың функцияһы төптән һаҡланып килә: былдай дәфтәрҙәрҙә йәки хаттарҙа уның хужаһына (адресатҡа) иҫтәлек итеп төрлө шиғыр, йырҙар, теләктәр яҙып ҡалдырыла (мәҫәлән, ҡасандыр бергә булған минуттарҙы, көндәр, йылдарҙы иҫкә алыу (йыш ҡына бергә уҡыған йылдарҙы), «онотма — иҫкә ал» планындараҡ, айырылышҡас, үткән көндәрҙе хәтерләп, һағыныу, дуҫты яратыу кеүек тойғолар киләсәккә изге теләктәр әйтеү менән үрелеп китеүсән, араларында ҡәҙимге шиғырҙар һәм йырҙар ҙа осрай, шулай уҡ әле генә әйтелгән һыҙат-билдәләрҙең бөтәһен дә берләштергәндәре лә бихисап). «Йәдкәрҙе ирекһеҙҙән ситкә китеүсе (һуғышҡа, әрмегә, төрмәгә, һөргөнгә ебәрелеүсе булыуы ихтимал. — *Н. Х.*) яҙып йә йырлап ишеттереп, шуны отоп алырға тәҡдим итеү формаһында ҡалдырыу йолаһы ла булған»[1].

...Беҙ китәбеҙ инде, ай, үҙебеҙ,
Васыят булыр әйткән һүҙебеҙ.
Ҡара ҡаҙҙар ҡайтыр, беҙ ҡалырбыҙ,
Тутығыр микән ҡайтыр юлыбыҙ, —

тип йырлағандар, мәҫәлән, башҡорт яугирҙары француз яуына киткән саҡта[2].

Тағы шул: хәтер дәфтәрен тотоу йолаһы, бер яҡтан, йола фольклорының матур бер үрнәге, төрө булараҡ ҡабул ителһә, икенсе яҡтан, уны саф фольклор, йәғни коллектив ижад емеше итеп ҡарап булмай, тип әйтеүселәр ҙә булыр. Сөнки, ғөмүмән, ошондай дәфтәрҙәр тотоу үҙе уҡ йола булһа, уның эстәлеге иһә айырым кешеләр ижады тәшкил итә. Дөрөҫ, халыҡ араһында таралған йыр һәм таҡмаҡтарҙың трафаретҡа әйләнгән дөйөм ерҙәре йыш яңғырай. Әммә, асылда, шул дәфтәрҙәргә ингән шиғри хаттар, иҫтәлеккә тип яҙылған йырҙар бөгөн исемдәре билдәһеҙ булып ҡалған айырым кешеләр ижады. Тимәк, бында, ысынлап та, поэтик әҙәби ижад тураһында ла һүҙ йөрөтөргә урын бар кеүек. Икенсе төрлө әйткәндә, йәдкәр яҙыу, иҫтәлек дәфтәрен тотоу күренеше йола фольклоры менән әҙәби ижад емешенең тығыҙ

---

[1] Башҡорт халыҡ ижады: Йола фольклоры. — 26-сы б.

[2] Башҡорт халыҡ ижады: Йырҙар / Төҙ., баш һүҙ авт., аңлатмалар биреүсе С. Галин. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1974. 1-се кит. — 72-се бит.

бәйләнешендә үҫеп сыҡҡан традиция буларак ҡабул ителә. Шулай ҙа, эстәлеге кем тарафынан яҙылыуына ҡарамаҫтан, халыҡ араһында киң популярлыҡ яулаған күренеш буларак, ул ысын мәғәнәһендә йола булыуҙан туктамай, халыҡ ихтыяры менән йәшәй һәм йола буйынса һаҡлана бара. Был яғынан ҡарағанда, ул — йола фольклоры. Бөгөнгө көндә әйләнештән юғалып барған был йола күренеше үҙендә халҡыбыҙҙың мәҙәниәте, тормошо хаҡында байтаҡ мәғлүмәттәр һаҡлап килә: йәнле телдә кешелекле аралашыу, аңлашыу, этнопедагогика, тәрбиә биреү, эстетик зауыҡты үҫтереү, республикабыҙҙың төрлө төбәктәренә хас диалектизмдар һ. б. Быларҙың барыһы ла дөйөм белем биреү мәктәптәрендә әҙәбиәт, мәҙәниәт дәрестәрендә уҡытыусыға ярҙам итерлек ҡулланма булыуы менән әһәмиәтле. Төрлө темаға арналған дәрестәргә материалды ошо китаптан табырға мөмкин, балаларҙы ҡыҙыҡһындырыу ниәте менән өйҙән ата-әсәләре, олатай-өләсәйҙәренең ошондай хәтер дәфтәрен һорап (һаҡланған булһа инде), дәрестә өлгө итеп күрһәтеп, фотоһүрәттәрен яһап, күргәҙмә лә ойоштороу ҡыҙыҡлы буласаҡ. Балалар араһында сағыу иллюстрацияларға бай иҫтәлек дәфтәренә үҙенә күрә конкурстар ҙа үткәрергә булыр ине. «Шәжәрә» байрамдарын үткәргәндә лә ошо күргәҙмәне файҙаланырға мөмкин һ. б. Дөйөмләштереп әйткәндә, иғтибарға тәҡдим ителгән әлеге китап туған тел, әҙәбиәт, мәҙәниәт, кластан тыш уҡыу дәрестәре уҡытыусылары өсөн төрлө яҡлап ҡулланыу файҙалы. Бында инде уҡыусы бала һис шикһеҙ үҙе белем алыу процесында туранан-тура ҡатнаша ала: ул күрә, ишетә һәм үҙ ҡулы менән эшләй.

Йәдкәр, иҫтәлектәр үҙҙәренең йөкмәткеһе, художестволы һүрәтләнеше, тәғәйенләнеше яғынан бик бай. Улар теләктәр теләү, алғыш, васыят һәм өгөт-нәсихәт әйтеү кеүек жанр өлгөләрен файҙаланып, дуҫлыҡ һәм мөхәббәт, осрашыу һәм айырылышыу кеүек темаларҙы үҙ эсенә ала.

Ғөмүмән, классик жанрҙарҙы айырыусы төп үҙенсәлектәрҙең ҡайһыныһы өҫтөнлөк алыуы күҙлегенән сығып, иҫтәлектәрҙе идея-эстетик, тематик йүнәлештәре, үҙенсәлектәре яғынан шартлы рәүештә шундайыраҡ төрҙәргә бүлеп ҡарарға мөмкин булыр ине:

— лирик иҫтәлектәр (дәфтәр, көндәлек, альбомға яҙып ҡалдырылған йәдкәрҙәр; сәләм-хат формаһындағы иҫтәлектәр; дуҫлыҡ, мөхәббәт хаҡындағы иҫтәлектәр);

— лирик-драматик йәдкәр һәм иҫтәлектәр (айырылышыу минуттарының яҡынлашып килгән бер мәлендә моңайыу, үкенеү, яңынан осрашыуҙар хаҡында хыялланыу, киләсәккә пландар ҡороу һ. б.);

Конец ознакомительного фрагмента

Уважаемый читатель!

Размещение полного текста данного произведения
невозможно в связи с ограничениями
по IV части ГК РФ

Эту книгу вы можете прочитать в
Оренбургской областной универсальной
научной библиотеке им. Н. К. Крупской

По адресу: г. Оренбург, ул. Советская 20
телефон для справок: (3532) 32-32-26